*Нияз МӘЖИТОВ,*
*Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы*
*Башҡарма комитеты рәйесе*

# ЯҘМЫШЫБЫҘ ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ҠУЛДА

Хөрмәтле милләттәштәр, Ҡоролтай эшен ойоштороусылар! Күптән көткән теләгебеҙ — Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү — ысынбарлыҡҡа әйләнде һәм Башҡарма комитет уға әҙерлек эштәрен алып бара. Министрҙар Кабинетының социаль-гуманитар бүлеге менән берлектә Ойоштороу комитетында тейешле документтар ҡабул ителде. Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү тураһында Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың Указы сыҡты. Ҡоролтайҙы ойошҡан рәүештә, беренсеһенә ҡарағанда ла йөкмәткелерәк һәм һөҙөмтәлерәк итеп үткәреү зарур. Алда торған эшебеҙ ҡатмарлы, ифрат яуаплы. Ойоштороу комитеты тарафынан ҡабул ителгән документтар араһында Икенсе Ҡоролтайға делегаттар һайлау тәртиптәре күрһәтелгән Положение бар. Уға ярашлы рәүештә Башҡортостандағы һәр ике мең башҡорттан бер делегат, ә күрше өлкәләрҙән, БДБ илдәрендә йәшәгән һәр өс мең башҡорттан бер делегат һайланасаҡ. Ҡоролтай Нефтселәр һарайында үтәсәк. Башҡортостандан яҡынса 500, өлкәләрҙән 200, сит илдәрҙән 100 һәм ҡунаҡ итеп саҡырылған 200 самаһы кеше ҡатнашасаҡ.

Башҡалабыҙ Өфөлә дәүләт, фән, мәҙәниәт һәм башҡа өлкәләрҙә эшләгән иң абруйлы милләттәштәребеҙ йыйылған. Уларҙың күптәрен һәр районда, ҡалала икешәрләп-өсәрләп район-ҡалалар иҫәбенә Ҡоролтайға делегат итеп һайлауҙы хуп күрәбеҙ һәм Ойоштороу комитетының был тәҡдимен районшарҙа аңларҙар тип уйлайбыҙ.

Күрше өлкәләрҙә район, өлкә ҡоролтайҙары үткәреү мөһим эш. Пермь, Свердловск, Ҡурған өлкәләренең күп кенә райондарында урындағы бүлексәләр әле булдырылмаған, Пермь өлкәһендә өлкә ҡоролтайын үткәреү бурысы тора. Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан райондары, ҡалалары менән күрше өлкәләр ҡалалары араһында нығылы бәйләнеш булдырылды. Өлкәләрҙә ҡоролтайҙар үткәреү ваҡытында был бәйләнеш тағы ла үҫеш алһын ине.

Иптәштәр! Икенсе Ҡоролтайға әҙерлек эшмәкәрлегебеҙҙе ҙур талапсанлыҡ менән анализлап, уның яҡшы яҡтарын үҫтереү, килешмәгән яҡтарын төҙәтеү күҙлегенән башҡарылһын. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, ошоға тиклем һәр районда, ҡалала ҡоролтайҙың бүлексәләре булдырылһа ла, улар бер кимәлдә эшләмәне, ҡайһы берҙәре илкеһалҡы ғына эшләне, ә күп урындарҙа ойошмалар формаль исемлектә генә йәшәп килде. Был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә кәрәк һәм эште йәнләндереү өсөн Ҡоролтай идеяларын бөтә халҡыбыҙға, һәр башҡорт ғаиләһенә, һәр башҡортҡа еткерергә, уларҙы ҡыҙыҡһындырырға тейешбеҙ.

Икенсе Ҡоролтайға әҙерлекте, бәләкәй һәм ҙурлығына ҡарамай, башҡорттар йәшәгән һәр төбәктән башларға кәрәк. Ҡоролтайҙың ниге-

ҙен тәшкил иткән йыйылыштарҙа халыҡтың социаль хәле, хужалыҡтарҙың хеҙмәт етештереүсәнлеге, кешеләрҙең хеҙмәт менән тәьмин ителеү йәки ителмәүе, ауылдарҙың һәм йорт-ҡаралтыларҙың төҙөклөгө, һәр ғаиләнең матди-иҡтисади һәм рухи донъяһының дөйөм кимәле һәм башҡа мәсьәләләр тикшерелергә, уларҙың үсеш мөмкинлеге ҡаралырға тейеш. Дөйөмләштереп әйткәндә, улар бөтәһе лә физик һәм социаль экология тигән төшөнсәләрҙе үҙ эсенә ала һәм улар тураһында ҡайғыртыу, ойоштороу эштәре алып барыу ижтимағи кимәлдә үҙаллы идара итеүҙе күҙ уңында тота. Ошо үҙаллы идара итеү бурыстарын Ҡоролтайҙың урындағы ойошмалары үҙ ҡулына алырға тейеш. Милли йолаларҙы, байрамдарҙы ойоштороу, йәш быуынды милли мәҙәниәт, традициялар менән таныштырыу, милли мәғрифәтте тулыһынса эсенә алған заманса уҡыуҙы булдырыу бурыстарын да атҡарырға тейешбеҙ. Былар һәр төбәк, район, ҡала, дәүләт күләмендә булған проблемалар. Улар тейешле кимәлдә район, ҡала, өлкә ҡоролтайҙары, делегаттарҙың иғтибар үҙәгендә булһын.

Беҙҙең Ҡоролтай ижтимағи ойошма, һәм һәр атҡарыласаҡ эшебеҙ урындағы дәүләт органдары, хужалыҡ етәкселәре менән берлектә, уларҙың ярҙамына таянып эшләгәндә генә тейешле һөҙөмтә бирә ала. Бындай берҙәмлекте булдырырға беҙҙең хоҡуҡи нигеҙебеҙ бар: Ҡоролтай үҙ эшен Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты тарафынан раҫланған «Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү» дәүләт программаһына ярашлы алып бара һәм дәүләт органдары Ҡоролтай эштәрен үҙҙәренең вазифалары, башҡарған эштәренең айырылғыһыҙ өлөшө тип ҡарарға тейеш.

Һәр төбәктә Ҡоролтай эштәрен уңышлы алып барыу өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған, беҙгә тикең һыҙғанып эшләргә ҡала.

Һәр ауылдан, төбәктән район ҡоролтайҙарына хеҙмәт алдынғылары, халыҡ яҙмышы өсөн янып-көйөп йөрөгән, хөрмәт ҡаҙанған кешеләр делегат булып һайланырға тейеш. Ошо йәһәттән, Беренсе Ҡоролтайҙан һуң тупланған эш тәжрибәһенән, ойоштороу комитетында әйтелгән фекерҙәрҙән сығып, бер нисә мөһим тәҡдим индерге килә.

Беренсе Ҡоролтайҙа ҡатнашҡан делегаттарҙың байтаҡ өлөшө артабан Ҡоролтай эшендә бер ҙә ҡатнашманы тип әйтһәк, хата булмаҫ. Был беҙҙең ҙур етешһеҙлек, шуға күрә район, өлкә ҡоролтайҙарына, Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына эшлеклелек яғынан ышаныслы, егәрле һәм уңған, Өсөнсө Ҡоролтайға тиклем ең һыҙғанып эшләрлек, милләт мәнфәғәте өсөн янған кешеләр һайланырға тейеш. Һайланасаҡ делегаттарҙың 30 процентын 28-30 йәштән дә оло булмаған милләттәштәр тәшкил итергә тейеш. Һүҙ Ҡоролтай хәрәкәтенә йәш быуынды йәлеп итеү, уларҙы эш алымдарына өйрәтеү һәм быуындар бәйләнешен тәьмин итеү тураһында бара.

Күптәрегеҙгә мәғлүм, Рәсәй халҡы 2002 йылдың октябрендә үткәреләсәк халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы алдында тора. Был үтә мөһим сәйәси кампания һәм уның һөҙөмтәләре илдең, шул иҫәптән милли Ватаныбыҙ — Башҡортостандың һәм һәр милләттең артабанғы үҫешенә ҙур йоғонто яһаясаҡ. Үткән йылдың октябрендә ойошторолған Ҡоролтайҙың киңәйтелгән ултырышы нәҡ ошо кампанияға әҙерлекте ойоштороу мәсьәләһен ҡарағайны. Ундағы доклад, ҡабул ителгән ҡарарҙар тулыһынса «Ватандаш» журналының 2002 йылғы 1-се һанында донъя күрҙе. Журнал был темаға артабан да даими мәҡәләләр баҫтырасаҡ.

Ошо темаға бағышланған бик күп фәнни тикшеренеүҙәр, архив материалдары раҫлауынса, 1989 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу кампанияһында һәм унан алда Башҡортостанда партия һәм дәүләт етәкселәре ҡатнашлығында, урындарҙағы радикаль фекерҙә торған татар милләтселәре тарафынан башҡорт халҡына ҡарата тупаҫ провокация алып барылды. Хәҙерге ваҡытта Татарстан дәүләт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән депутаттар,



04.2002 2 ÷àñòü.p65 103 29.07.02, 17:43

яҙыусылар, интеллигенция вәкилдәре башҡорттарҙы алдап, ҡурҡытып татарлаштырыуға йүнәлтелгән сәйәсәт алып барыуҙан баш тартмай. Былар беҙҙе һаҡ булырға өндәй һәм шуға күрә Икенсе Ҡоролтайға әҙерлек кампанияһында һәм Ҡоролтайҙың үҙендә был тема иң мөһим темаларҙың береһе булыр тигән уйҙабыҙ.

Ойоштороу комитеты Икенсе Ҡоролтайҙың структураһын һәм эш тәртибен билдәләне. Ҡоролтайҙа Республика Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов сәйәси доклад менән сығыш яһаясаҡ. Унан һуң Ҡоролтайҙың отчет доклады тыңланасаҡ һәм беренсе көндө кискә тиклем пленар ултырыш дауам итәсәк.

Икенсе көндөң тәүге яртыһында Ҡоролтайҙың төрлө мөһим проблемаларына бағышланған 11 секция эшләйәсәк. Әйтергә кәрәк, ярты көн секциялар өсөн бик аҙ, шуға күрә мәсьәләләрҙе тейешле кимәлдә тикшереп, йөкмәткеле ҡарарҙар ҡабул итер өсөн секция темаларының күбеһе март-май айҙарында фәнни конференцияларҙа ҡараласаҡ. Ойоштороу комитеты район, ҡала, өлкә ҡоролтайҙарында ошо мәсьәләләр буйынса фекерҙәр туплап, үткәреләсәк фәнни конференцияларҙа, түңәрәк өҫтәлдәрҙә һәм Ҡоролтайҙың үҙендә ишеттерһә, дөйөм эшебеҙгә ҙур файҙа килтерер ине.

Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының әҙерлек сифаты, уның йөкмәткелеге һәм ойошҡанлыҡ кимәле бөтә район, ҡала һәм өлкә ҡоролтайҙары рәйестәренең эшлеклелегенән тора. Урындарҙа әҙерлек сараларын һәм делегаттар һайлауҙы нисек итеп ҡуяһығыҙ — һөҙөмтәһе лә шулай буласаҡ. Урындағы тәүге ойошмаларҙа, район, ҡала, өлкә һәм республика ҡоролтайҙарында башҡарма комитеттар отчет менән сығыш яһаны, унда Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу йәһәтенән нимәләр эшләнде, нимәләр һәм ниндәй сәбәптәр арҡаһында үтәлмәне, киләсәккә эш пландары һәм Икенсе Ҡоролтайға тәҡдимдәр тикшерелергә тейеш. Беҙ үҙебеҙҙең был тележтәрҙе туплап, урындарҙағы ярҙамсыларыбыҙға методик тәҡдимдәр, ҡулланмалар рәүешендә һеҙҙең иғтибарығыҙға тапшырырға булдыҡ. Әгәр ҙә һеҙ уны ҡабул итеп, файҙаланһағыҙ, Икенсе Ҡоролтайға әҙерлекте дөйөмләштергән план буйынса алып барырға мөмкин булыр ине. Ундағы тәҡдимдәрҙең күбеһе киләсәккә йүнәлтелгән уйҙар кеүек ҡабул ителеүе мөмкин, ләкин уларҙың бөтәһе лә күп яҡлы тормошобоҙҙо сағылдыра һәм Ҡоролтай ойошмаларының иғтибар үҙәгендә торорға тейеш. Беҙҙең күҙаллауыбыҙ буйынса, был тәҡдимдәр түбәндәгенән тора.

1. Башҡортостан Республикаһы Президенты М.F. Рәхимовтың 2002 йылдың июнендә «Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү тураһында» Указын, Министрҙар Кабинеты тарафынан ҡабул ителгән «Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү тураһында» ҡарарын, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡабул иткән бөтә документтарҙы халыҡҡа аңлатыу эшен ойошторорға.

2. Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү маҡсаттары:

— төрлө төбәктәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе үҙ-ара берләштереү;

— халҡыбыҙҙың быуаттар төпкөлөнән килгән телен, мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм башҡа рухи байлығын, этник үҙенсәлеген глобализация шарттарында һаҡлау, үҫтереү;

— Рәсәй, донъя халыҡтары менән дуҫлыҡты, хеҙмәттәшлекте нығытыу, юғарыраҡ кимәлгә күтәреү;

— халҡыбыҙҙың социаль-иҡтисади, демографик хәлен яҡшыртыу.

3. Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына барған әҙерлек осоронда түбәндәге сараларҙы атҡарырға:

а) башҡорттар йәшәгән һәр төбәктә, ауыл һәм ҡала шарттарында, өлкәләрҙә, дәүләттәрҙә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының урындағы ойошмаларын, бүлексәләрен булдырыуҙы дауам итергә, булғандарының эшен йәнләнде-



04.2002 2 ÷àñòü.p65 104 29.07.02, 17:43

рергә, талапсанлыҡ күҙлегенән анализларға, уның эшенә бөтә башҡорт ғаиләләрен йәлеп итергә;

б) урындарҙағы Ҡоролтай ойошмаларының эшен анализлағанда, уларға баһа биргәндә һәм артабанғы эштәрҙе ойоштортанда түбәндәге мөһим мәсьәләләргә айырыуса иғтибар итергә:

— эшкә һәләтле һәр башҡортто эш менән тәьмин итеү шарттарын булдырыу;

— ауылдарҙы төҙөкләндереү, уларҙы административ үҙәктәргә заманса юлдар менән тоташтырыу;

— ауылдарҙы һәм һәр ғаиләне газ менән тәьмин итеү; эсәр һыуҙарҙы таҙа тотоу, урмандарҙы һаҡлау;

— һәр башҡорт ғаиләһенә үҙ тырышлығы менән заманса йорт-ҡура булдырыу;

— эскелек, наркомания, йәмғәт тәртибен боҙоу кеүек насар күренештәрҙе бөтөрөү өсөн көрәш алып барыу;

— быуаттар буйы һаҡланып килгән милли уйындарыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе һаҡлап алып ҡалыу, үҫтереү, байытыу;

— йәш быуынды милли рухта үҫтереү, һәр ғаиләлә туған телде даими ҡулланыу; һәр башҡортҡа башҡорт телен ҡайтарыу маҡсатында мәктәп, балалар баҡсалары, ғаилә менән анлыҡ эш алып барыу;

— һәр ғаиләгә физик яҡтан таҙа, рухи яҡтан бай балалар үҫтереү;

— һәр башҡортҡа ишле ғаилә ҡороу;

— һәр төбәктә милли традицияларға хас булған әсәйҙәр, оләсәй-олатайҙар ҡоро булдырыу, йәш быуынды тәрбиәләүҙә быуындар бәйләнешен өҙмәү бурыстарын йөкмәтеү;

— Башҡортостан ҡала һәм райондарының күрше өлкәләрҙәге башҡорттар йәшәгән район, ҡалалары менән булдырылған бәйләнештәрҙе, шефлыҡ эшен артабан үҫтереү, киңәйтеү, йөкмәткеһен байытыу;

— ҡала, ҡасаба, район үҙәктәрендә башҡорт телендә тәрбиә, уҡытыу алып барған балалар баҡсаларын, мәктәптәрен арттырыу;

— һәр китапханала башҡорт китабы, баҫмаһы бүлеге асыу, киңәйтеү;

— «Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында» Законды тормошҡа ашырыу барышын Ҡоролтай ултырыштарында тикшереү;

— мәктәп, балалар баҡсалары, клубтар, мәсеттәр эргәһендә ҡыҙҙар һәм ир балалар өсөн айырым традицион тәрбиә биреү үҙәктәре булдырыу;

— ата-әсәләр өсөн башҡорт теле, башҡорт мәҙәниәте лекторийҙары ойоштороу;

— башҡорт традицияһына нигеҙләнгән шөғөлдәр буйынса эшҡыуарлыҡты, кәсепселекте үҫтереү;

— бәләкәй бизнесты, эшҡыуарлыҡты, кәсепселекте башҡорт ауылдарына, башҡорт ғаиләләренә индереү;

— һәр башҡорт ауылында, төбәктәрҙә үҙ тарихын өйрәнеү, һәр ғаиләнең шәжәрәһен булдырыу;

— күрше өлкәләрҙә һәм сит илдәрҙә йәшәгән милләттәштәр һәм туғандарыбыҙ менән яҡындан аралашыу, тығыҙ бәйләнеш булдырыу, бигерәк тә мәктәп-ара делегациялар менән алмашыу традицияларын тергеҙеү;

— һәр районда, өлкәлә туған телдә гәзиттәр сығарыу, радио, телевизион тапшырыуҙар ойоштороу;

— милли баҫмаларҙың һәр өйҙә булыуын тәьмин итеү;

— һәр төбәктә халҡыбыҙ файҙаһына фиҙакәр хеҙмәт күрһәткән шәхестәрҙең иҫтәлегенә бағышланған осрашыуҙар үткәреү, исемдәрен мәңгеләштереү өсөн мәктәптәрҙә, йорттарҙа махсус таҡтаташтар булдырыу, китаптар, мәҡәләләр яҙыуҙы ойоштороу.

4. Район, ҡала, сит өлкәләр ҡоролтайҙарына Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат итеп халҡыбыҙҙың иң уңған егеттәрен, ҡыҙҙарын һайларға, һайланған делегаттарҙың 30 проценты 28-30 йәштән өлкән булмаған башҡорт булыуына ирешергә.

5. Икенсе Ҡоролтайға әҙерлек осоронда Башҡортостан Республикаһында, Рәсәй Федерацияһында һәм башҡа илдәрҙә йәшәгән халыҡтар менән татыулыҡ, дуҫлыҡ, үҙ-ара хеҙмәттәшлекте киңәйтергә.